# Тема:Башҡорт халыҡ уйындары.
# (проект эше)

Башҡарҙы: Лағыр балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе Хәйрова Юлиә Радмил ҡыҙы

Балаларҙы тәрбиәләүҙә уйындар айырыуса ҙур урын тота. Уйын улар өсөн донъяны танып белеү сараһы, хеҙмәт мәктәбе һәм һәр яҡлап гармониялы үҫеү сығанағы. Ысынлап та, уйнаған саҡта бала өҙлөкһөҙ хәрәкәттә була, ә был хәл инде уның бөтә яҡлап йылдам үҫеүен тәьмин итә. Был физиологик процесс булһа, балаларҙы йәмғиәтебеҙ өсөн кәрәкле кешеләр итеп тәрбиәләүҙең икенсе бер күренеше – психологик процесс та уйындың айырылғыһыҙ өлөшө булып тора



# Маҡсат:

1)“Башҡорт халыҡ балалар уйындары” темаһын өйрәнеү, халыҡ уйындарының сюжетлы һәм

хәрәкәтле төркөмдәргә бүленешен аңлатыу, уйындар темаһына ҡағылышлы һүҙҙәрҙең, һүҙбәйләнештәрҙең актив һүҙлек составына инеүен булдырыу;

2) Балаларҙы башҡортса әүҙем аралашыуға ылыҡтырыу, фекерләү ҡеүәһен, телмәр күнекмәләрен,

хәтерҙәрен үҫтереү; сослоҡ, таҫыллыҡ, йылдамлыҡ, иғтибарлыҡ сифаттарын тәрбиәләү; һөйләү күнекмәләрен камиллаштырыу.

3) башҡорт теленә һөйөү һәм ҡыҙыҡһыныу,балаларға башҡорт халҡының милли уйындарын өйрәтеү; үҙ милләтеңә һөйөү тәрбиәләү; балаларҙа милли мәҙәниәттең тәү сығанағын өйрәнеүгә нигеҙ булдырыу, бер-береңә ихтирам, иғтибар, ярҙамсыллыҡ тәрбиәләү.

Белем биреүсе: балаларҙа милли мәҙәниәттең тәү сығанағын өйрәнеүгә нигеҙ булдырыу; уйындарына ҡыҙыҡһыныу уятыу.

Үҫтереүсе: балаларҙың телмәрен, иғтибарлыҡтарын  үҫтереү; һүҙлек запасын байытыу.

Тәрбиәләүсе: үҙ милләтеңә, теленә, уйындарына һөйөү тәрбиәләү.

# Фәнни-ғәмәли эҙләнеү эшенең актуаллеге

Һуңғы йылдарҙа һәр бер йортта интернет селтәре барлыҡҡа килеү менән балалар компьютерға йомолдолар. Өйҙән сыҡмай ғына виртуаль уйындарҙы хуп күреүселәр артҡандан- арта бара. Ата- әсәләр ҙә әллә ваҡыт юҡлыҡҡа һылтанып, әллә урам буйында йөрөүгә ҡарағанда өйҙә ултырыуҙы һәйбәтерәк күреп, балаларының уйындарына бик иғтибар бирмәйҙәр. Шуның менән уларҙың һаулығына ниндәй зыян килеүен уйламайҙар.



Ҡыҙғаныстҡа ҡаршы, хәҙерге ваҡытта балалар араһында элек- электән йәшәп килгән халыҡ уйындары онотола бара. Ә халыҡ уйындары беҙҙең иң ҡиммәтле мираҫтарыбыҙҙың береһе бит! Беҙҙең төп маҡсат- балаларға хәрәкәт талап иткән уйындарҙың файҙаһы тураһында аңлатма эше алып барыу. Һәм, әлбиттә, уларҙы компьютерҙан айырып урам буйына алып сығыу.

Баланың телмәрен үҫтереү өсөн “Төлкө менән айыу”, “Эт үҙенә нисек хужа тапҡан?” , “Айыу менән бал ҡорттары” тигән башҡорт халыҡ әкиәттәрен, “Шалҡан”, “Тирмәкәй”, “Ҡыҙыл башлыҡ” рус халыҡ әкиәттәрен уҡыныҡ, аҙаҡ уларҙың эстәлеген һөйләргә, йә уларҙың йөкмәткеһе буйынса әңгәмәләштек.Был саҡта баланың әкиәт геройҙарына ҡарата булған үҙ мөнәсәбәттәрен белергә һәм уларҙы бергәләп баһалау мөмкинселеге тыуа. Әкиәттәрҙән ҡыҫҡа ғына өҙөктәрҙе ролдәргә бүлеп,сәхнәләштереп бергәләп уйнарға була. Әкиәттәр баланың фекерләүен, хәтерен, бәйләнешле телмәрен үҫтерә, кешелеклек сифаттары тәрбиәләүгә ярҙам итә. Әкиәттәргә иллюстрация эшләп, һүрәтенә аңлатма бирһә, тағы ла отошлораҡ.

Балаларҙың телмәре үҫешенә “Ҡул ҡурсаҡтары” менән төрлө

әңгәмәләр, диалогтар ҡороу ҙа бик отошло алымдарҙың береһе.Ҡурсаҡтар менән бала ихлас аралаша, телмәрен байыта.








“Уйындарҙа- хәрәкәт, хәрәкәттә- бәрәкәт”, тип халыҡ юҡҡа ғына әйтмәгән. Бала донъяға килгәс тә хәрәкәтләнә башлай, сөнки хәрәкәт- йәшәүҙең һәм физиологик үҫештең төп нигеҙе ул. Бары хәрәкәт арҡаһында ғына кеше йәшәй, үҫә, тормош ҡора, ижад итә һәм эшләй. Балаларҙы тәрбиәләүҙә уйындар айырыуса ҙур урын алып тора. Әкиәт, йырҙар уйлап сығарған кеүек уйындарҙы ла халыҡ уйлап тапҡан.





Коллектив рәүештә башҡарылған төрлө хәрәкәтле уйындар бик күп һәм үҙенең төрлөлөгө менән айырылып тора. Уйындарҙың күбеһе хәрәкәткә, йүгереүгә, һиҙгерлекте арттырыуға, етеҙлеккә өйрәтә, балаларҙа берҙәмлек, намыҫлылыҡ, татыулыҡ сифаттары тәрбиәләй.

Шулай уҡ балалар менән дидактик уйындар,бармаҡ уйындары ҡулланабыҙ. Дидактик уйындар баланың телмәрен үҫтереүҙә төп өлөштө биләй.

Күргәҙмә материлдар ярҙамында әңгәмә, диалог ҡороу- баланың һөйләмдәре төҙөк, фекерләү кимәле юғары, фантазияһы бай булыуға этәргес көс бирә.Донъяны танып белергә өйрәтә.









the
SHOES


АМАНАТ 2020
АМАНАТ 2020 Декабрь
АМАНАТ 2021 Гинуар
Башкортостан Республикаһының балалар журналы
№11.2020
№10.2020



# Йомғаҡлау

Шулай итеп, балаларҙың бәйләнешле телмәрен үҫтереү тәрбиәселәрҙең дә, ата- әсәләрҙең дә төп бурысы булып тора .Мәктәпкә барғанда бала бөтә өндәрҙе лә дөрөҫ әйтеп, һөйләмдәрҙе дөрөҫ төҙөп, үҙенең уй – фекерен эҙмә – эҙлекле, йөкмәткеле һәм бәйләнешле итеп,, ҡаушамайынса һөйләй белһен өсөн, беҙ, өлкәндәр барыһын да эшләргә тейешбеҙ.Уйындар ярҙамында телмәре үҫешкән, халыҡ йолаларын белгән, тарихҡа, туған телгә ихтирам тәрбиәләнгән балаға тормошта үҙ урынын табыу ауыр булмаҫ



Иғтибарығыҙ өсөн рәхмәт!